БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 179-181

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.035

УДК 82-1

**Г.Н. Ҡасҡынова**

*Бирский филиал БашГУ*
*ул. Интернациональная, 10, г. Бирск, 452450, Россия*
*E-mail: kaskinova-gulnur@mail.ru*

# ҠӘҘИМ АРАЛБАЙҘЫҢ «АҠҺАҠАЛ» ПОЭМАҺЫНЫҢ ИДЕЯ-КОМПОЗИЦИЯ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

В данной стаье рассматриваются идейно-композиционные особенности поэмы «Аксакал» К. Аралбая. Отмечается проблематика поэмы, в которой поднимаются нравственно-этические, социальные проблемы.

В работе также отмечается взаимосвязь разных жанровых модификаций: приемы башкирской народной песни, кубаира усиливают эмоциональность произведения.

*Ключевые слова:* поэма, посвящения, башкирская народная песня, кубаир, идейно-композиционные особенности

Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбайҙың «Аҡһаҡал» [Аралбай, 2015, 66-72] поэмаһы сик буйы ғәскәрҙәре һәм эске ғәскәрҙәр отличнигы, отставкалағы подполковник, Башҡортостан һәм Мәскәү милли йәмғиәт ойошмаларының әүҙем ағзаһы, тыл һәм хеҙмәт ветераны Билал Заһит улы Билаловҡа арналған.

Автор ижадында быңдай бағышлауҙар яңы күренеш түгел. Ғалимдар Суфиян Поварисовҡа, Ғиниәт Ҡунафинға, Рим Йәнғужинға, рәссам Фазлетдин Ислаховҡа, яҙыусы Таңсулпан Ғариповаға, Фәрит Ғәбитовҡа арналған әҫәрҙәре быға тиклем баҫылып сыҡҡайны инде. Ә иһә бөйөк шәхесебеҙ Салауат Юлаевҡа "Батыр яраһы", Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа "Ҡаратау тотҡоно", бөйөк украин шағиры Тарас Шевченкоға "Тарас менән Ҡарас", яҡташы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевҡа "Йыраусы" поэмаларын арнаны шағир.

Ҡәҙим Аралбай поэманың исеме тураһында баштан уҡ асыҡлап китә: инеш өлөштә үк төп геройы Билалды "нағыҙ аҡһаҡал, ил алдында сал аҡыл" тип нарыҡлап ҡуя.

Әҫәр аҡһаҡалдың бала сағын хәтерләү алымынан башлана. Күкен һөҙөп йөрөгән малайҙың Ташлы йылғаһы аша таҫмалай балҡыған йәйғор күперенән үтеүе һәм күп тә үтмәй, бабай булып ошо йылға буйына әйләнеп ҡайтыуы тасуирлана. Ҙур булмаған йылға "ғүмер" тигән оло төшөнсә менән ассоциациялана:

*Бәй, бабай – теге малай!*
*Күкен һөҙгән бер талай..*
*Ташлы буйына ҡайтҡан,*
*Ә йылға... ҡалай ташҡан.*

Бүлекте тыуған йылға тураһындағы түбәндәге йыр юлдары менән йомғаҡлай:
*Ташлы һыуҡайҙары тирәкле,*
*Ташлы һыуҡайҙары биҙәкле.*
*Ағын һыуҙай аҡҡан ғүмеркәйҙәр,*
*Өҙә лә генә икән үҙәкте...*

Әйткәндәй, был йыр юлдары халыҡ йырына бик яҡын торһа ла, фольклорҙан алынмаған. Авторҙың үҙ ижад емеше. Ғөмүмән, Ташлы тураһындағы йырҙар – поэма бүлектәрен бер-нисә урында йомғаҡлаусы уңышлы сара.

Ретроспектива алымы төп герой Билалдың бала саҡ йылдарын барларға булышлыҡ итә: ауыр һуғыш йылдарында үҫмерҙең фермала көнө-төнө өлкәндәр ыңғайына эшләп, "Данлы хеҙмәт өсөн" миҙалына лайыҡ булыуы, атаһы фронтта һәләк булғас, балалар йортона эләгеүе, Ҡараҡомда хеҙмәт итеүе иҫкә алына.

Сүллектә хеҙмәт итеү ваҡиғаһы башҡорт халҡының тарихы менән тәбиғи бәйләнеп китә. Автор Үҫәргән башҡорто Билал Билаловтың нәҫел тамырҙарын да барлай: нәҫел башы Байса тархандың улы Билалдың да тархан, тылмас булыуын иҫкә ала. Байса – Билал – Байһары – Ишемғол – Мөхәрләм – Заһит – Билал рәүешендә һуҙылған ете быуын шәжәрәһен тергеҙә.

Өсөнсө бүлек Үҫәргән ырыуы башлығы Мөйтән бейгә мөрәжәғәт рәүешендә төҙөлгән. "Уй уятыусы, ҡуҙ баҙлатыусы" бейҙең холҡондағы сәм һәм дипломатлыҡ кеүек сифаттарға һоҡлана шағир. Таҙа генофонд, башҡортлоҡ кеүек төшөнсәләр тураһында уйлана. Алып батырҙай илде, ерҙе ҡурсар батырҙарҙы иҫкә ала.

Суверенлыҡ тигән төшөнсәнең "с" хәрефе ҡалманы, тип өҙгөләнгән автор батырҙар-әрүахтарҙың юл күрһәтеүен көтә. Уларҙың өнһөҙлөгө Мөйтән бей алған мансафтың ҡалмауы, Алдар, Салауат батырҙар ҡатнашҡан восстаниеларҙың баҫтырылыуына, Ҡаһым түрәнең ағыуланыуына әсенеү тойғолары менән ялғана. Автор сетерекле хәлдәрҙән ҡотолоу юлын аҡһаҡалдар мәктәбен тергеҙеүҙә күрә.

«Төпләнмеш һүҙ» тип аталған бүлексәлә геройының күңеленә яҡын булған, йәғни башҡорт йәшәгән һәр төбәктә ерҙе, телде һаҡлау проблемаларын күтәрә автор. «Тыңла, Борай, Хәйбулла...» тип башлана был бүлексә. Хәйбулла лирик геройҙың тыуған төбәге булһа, Борай – Билал Заһит улының кейәү булған, "башҡорттарға башҡортлоғон аңлатып" (шағирә Факиһа Туғыҙбаева һүҙҙәре менән әйткәндә – Г.Ҡ.) күп тапҡырҙар сығыш яһаған ер.

Поэманың аҙағында автор аҡһаҡал төшөнсәһенә тағы ла бер тапҡыр әйләнеп ҡайта. Бүлексә ҡобайыр стилендә бирелә:
*Тынғыһыҙ йән – аҡһаҡал,*
*Йәшәүгә сәм – аҡһаҡал,*
*Илдең салы – аҡһаҡал,*
*Илдең таты – аҡһаҡал,*
*Илдең күрке – аҡһаҡал,*
*Илдең ирке – аҡһаҡал,*
*Илдең йәме – аҡһаҡал,*
*Илдең ғәме – аҡһаҡал,*
*Ай, аҡһаҡал, аҡһаҡал!*

Автор «Аҡһаҡал» поэмаһында Билал Заһит улының барлыҡ эштәрен барлап, уның аҡһаҡал тигән оло исемгә лайыҡ булыуын кире ҡаҡҡыһыҙ итеп дәлилләп ҡуя. Поэманың идея-композиция үҙенсәлектәре тап ошо маҡсатты тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән дә инде. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай уҡыусыларында »хәҙерге заманда ла аҡһаҡалдар бар, улар булғанда халҡыбыҙҙың да киләсәге яҡты» тигән ышаныс тыуҙыра.

**Әҙәбиәт**

Аралбаев Ҡ. Ә. Аҡһаҡал (поэма) / Ҡ. Аралбай // Ватандаш. 2015. №2. 66-72-се биттәр.

**Kaskinova G.N.**

*Birsk branch of BashSU*
*st. International, 10, Birsk, 452450, Russia*
*E-mail: kaskinova-gulnur@mail.ru*

## IDEOLOGICAL AND COMPOSITIONAL FEATURES OF THE POEM BY KADIM ARALBAY «AKSAKAL»

This article discusses the ideological and compositional features of the poem "Aksakal" by K. Aralbay. The problems of the poem are noted, in which moral, ethical and social problems are raised.

The work also notes the relationship of different genre modifications. For example, the techniques of the Bashkir folk song, kubair enhance the emotionality of the work.

*Keywords*: poem, initiations, Bashkir folk song, kubaiir, ideological and compositional features

## References

Aralbaev K. Aksakal (poem) / K. Aralbay // Vatandash. 2015. No2. P. 66-72.